# *Аҡмулла исеме мәңгелек*

М. Аҡмулла тормошо һәм ижадына арналған башҡорт халҡы мәҙәниәте тарихы дәресе буйынса презентация

Кәримова Г.Я., Туймазы педагогия колледжы уҡытыусыһы

1-се слайд

## Маҡсаттар:

- М Аҡмулла тормошо һәм ижады буйынса мәғлүмәт менән таныштырыу.
- Аҡмулла шиғырҙарының идея-тематик йөкмәткеһен асыу, шағир күтәргән проблемаларҙың хәҙерге заманда ла актуаль икәнлеген күрһәтеү.
- Студенттарҙы үҙ аллы һәм төркөм эсендә эшләү күнекмәләренә өйрәтеү, фәнни тикшеренеү эштәренә йәлеп итеү, ижади һәләттәрен үҫтереү.
- Әҙип шәхесе өлгөһөндә йәштәрҙә әҙәп-әхлаҡ сифаттарын тәрбиәләү, Аҡмулла менән ғорурланыу тойғоһон уятыу.
- Бөгөнгө көндә халҡыбыҙҙың Аҡмулланы онотмауын күрһәтеү.

***Эпиграф:*** *Ҡараһаң, Аҡмулланың китабы был,*
*Эсендә – һыуһағанға шәрбәтле һыу.*
*Битенең бере көлөп, бере һүгәр,*
*Тура һүҙе – берәүгә им, берәүгә ыу.*

*М. Аҡмулла.*

## ***Дәрес планы:***

1. М. Аҡмулла эҙҙәре буйлап. Әҙип биографияһы
2. Аҡмулла шиғырҙары. Уларҙың идея-проблематик офоҡтары.
3. Шиғырҙарының жанр үҙенсәлектәре. Аҡмулла - шиғыр оҫтаһы.
4. Аҡмулла исеме бөгөнгө көндә.


Аҡмулла биографияһы
Шиғырҙары
Шиғырҙарында күтәрелгән мәсьәләләр
Аҡмулланы мин өр-яңынан астым...
М.Акмулла
Шиғырҙарының жанр үҙенсәлектәре
Аҡмулла образы башҡорт әҙәбиәтендә
Аҡмулла образы һынлы сәнғәттә

4-се слайд

## *Төркөмдәргә эштәр*

***1 -се төркөм*** "М. Аҡмулла эҙҙәре буйлап" картаһын төҙөй. Уларға Башҡортостан картаһы, әҙип биографияһы хаҡында карточкалар тапшырыла. Аҡмулла тормошо хаҡында картаға таянып һөйләргә әҙерләнегеҙ.

***2-се төркөм*** Аҡмулла шиғырҙарында күтәрелгән проблемаларҙы өйрәнә. Һеҙгә Ғ. Ҡунафиндың "Олуғ шәхесебеҙ" исемле мәҡәләһе, М. Аҡмулла шиғырҙары яҙылған карточкалар таратыла. Мәҡәлә менән танышығыҙ, шиғырҙарҙы уҡығыҙ һәм шағир ниндәй проблемаларҙы күтәргән, шуны һөйләгеҙ. Яуап биргәндә шиғырҙарҙан өҙөктәрҙе тасуири уҡып күрһәтегеҙ.

***3-сө төркөм*** бөгөнгө шағирҙарҙың Аҡмулла хаҡындағы шиғырҙарын уҡый. Һеҙгә әҙип образы нисек асылғанын тикшерергә кәрәк.

# *М.Акмулла образы һынлы сәнғәттә*




6-сы слайд

# *Зилфәт Басыров*









7-се слайд

Ә.Арыҫланов



Р.Королевский



Р.Нурмөхәмәтов



8-се слайд

# Рәшит Имашев









# *Рафаэль Абдулов*









Ғ.Мөхәмәтшин

- А.Абуталипов
- Акмулла музейында







## М.Аҡмулла исемендәге башҡорт дәүләт педагогия университеты студенттары эштәре









12-се слайд

# Р. Зәйнетдинов, Г.Калита «Ер рухы»



13-сө слайд

## *Аҡмулла шиғриәтенең идея-проблематик офоҡтары*

- Аҡмулла, үҙе йәшәгән заманда халыҡтың ауыр тормошон күреп, халыҡты уҡырға, белемле, һөнәрле булырға саҡыра.
- Йәмғиәттең йөҙөн билдәләүсе, халыҡҡа өлгө булырлыҡ мәғрифәтле шәхестәрҙе ололап шиғырҙар яҙа.
- Аҡмулла кешене яҡшылыҡ өлгөһөндә тәрбиә биреү, әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләрен ҡуя. Уның өсөн иң ҡиммәт нәмә – кешенең күңел доньяһы, уй-ҡылыҡтары сафлығы.
- Байлыҡ артынан ҡыуыусы наҙан муллаларҙы, уларҙың ҡуштандары әсе тәнҡитләй.
- Йәмғиәттәге ғәҙелһеҙлектәр хаҡында уйлана. Ябай халыҡтың ауыр тормошон әсенеп тасуирлай.
- Тәбиғәт күренештәренә, йыл миҙгелдәренә арнап шиғри әҫәрҙәр ижад итә.
- Йәшәү мәғәнәһе хаҡында фекер йөрөтә, фәлсәфәүи әҫәрҙәр яҙа.

*Нәсихәттәр*

Иң әүәл кәрәк нәмә – иман, тигән,
Әхирәт эштәренә инан, тигән.
«Хоҙай, кисерер» - тигән менән эш
бөтмәйҙер,
«Иман шарты»н өйрәнмәһә – Иван, тигән.

Икенсе kиммәт нәмә – күңел, тигән,
Күңеле боҙоk әҙәмдән төңөл, тигән.
Боҙоkkа ер өҫтөнән аҫты артыk,
Булмаһа күңел таҙа – күмел, тигән.

Өсөнсө kиммәт нәмә – аkыл, тигән,
Аkылһыҙҙа тәүфиk яғы таkыр, тигән.
Аҙ эшкә асыуланып, динен боҙор,
Иманын көфөрлөккә һатыр, тигән.

Дүртенсе kиммәт нәмә – шөкөр, тигән,
Ниғмәткә шөкөрһөҙлөк – көфөр, тигән.
Ятkан ерҙән: «Хоҙай, кисер», - тигән
Сәбәп эҙләп, төҙ юл менән йүгер, тигән.

Бишенсе kиммәт нәмә – әҙәп, тигән,
Әҙәп тигән – мөхәббәткә сәбәп, тигән.
Көфөрлөк әҙәплелә тормағандай,
Әҙәпһеҙҙә иман тороу ғәжәп, тигән.

Алтынсы kиммәт нәмә – сабыр, тигән,
Сабыр кеше моратын табыр, тигән.
һәр эштә сабырһыҙҙың төбө – хурлыk,
Сабырһыҙлыk башkа бәлә һалыр, тигән.

Етенсе kиммәт нәмә – ихлас, тигән,
Ихласһыҙҙың эше kабул булмаҫ, тигән.
Аkыллылар ошо һүҙҙе белһә кәрәк:
Иман, аkыл, әҙәп, ихлас – юлдаш, тигән.

## Аҡмулла шиғырҙарының жанр үҙенсәлектәре

| Башҡорт халыҡ ижады | Көнсығыш поэзияһы | Ҡаҙаҡ әҙәбиәте |
|---|---|---|
| Ҡобайыр | Робағи | Йырау |
| Әйтеш | Ғәзәл, мәснәүи, рәдиф | Өлән |
| | Хитап | |
| | Мәдхиә | |
| | Мәрҫиә | |
| | Шикәйәт | |
| | Мәктүп | |

- Акмулла образы шиғриәттә

- МЯмалетдинов
- Р.Солтангәрәева
- Ф.Туғыҙбаева
- К.Аралбаев






# Аҡмулла образы башҡорт әҙәбиәтендә

*Башҡорт әҙәбиәте ғилемендә*



- *Р.Фәхретдинов*
- *Әхнәф Харисов*
- *Р.Шәкүр*





- Ә.Вилданов
- Ғ.Кунафин
- Ғ.Хөсәйенов
- З.Шәрипова









*Аkмулла образы прозала, драматургияла*

- Я.Хамматов
- Ғ.Шафиkов
- Н.Ғәйетбай
- К.Мәргән









20-се слайд



М.Акмулла
1892
1894 сентябрь
1872-1880
1867-1871
1866-1867
1859-1860
1831
«Башкортарым, үкыу кәрәк»
«Нәсихәттәр»
«Яз»
11 – 11
Робаги
Кобайыр
Р.Нурмөхәмәтов
А.Королевский

**Бәйге ҡатнашыусыһы, Туймазы педагогия колледжы уҡытыусыһы Кәримова Г.Я.:**

һәр халыҡтың үҙ дәүеренә ҡарата алдынғы фекер йөрөтөүсе аҡыл эйәләре була. Улар – милләтте яҡтылыҡҡа, белемгә өндәүсе, туған халҡы, мәҙәниәт яҙмышы хаҡында борсолоусы ябай һәм бөйөк шәхестәр. Шуларҙың береһе – Мифтахетдин Аҡмулла. Беҙ студенттар менән өс йылдан ашыу уның тормошон һәм ижадын өйрәндек: ғилми һәм методик хеҙмәттәрҙе, публицистик мәҡәләләләрҙе, әҙәби һәм сәнғәт әҫәрҙәрен тупланыҡ, тикшерҙек, системаға һалдыҡ. Ошо оло хеҙмәтебеҙҙең һөҙөмтәһе итеп «М.Аҡмулла» исемле мультимедиалы әсбәп әҙерләнек. Беҙ уны әҙәбиәт, Башҡортостан мәҙәниәте дәрестәрендә ҡулләнабыҙ.




Әйтергә кәрәк, электрон әсбәп буйынса эшләү мәлендә ҙур ҡәнәғәтлек кисерҙек, Аҡмулла шәхесе менән рухланып йәшәнек.

Бәйгегә ебәргән « Аҡмулла исеме мәңгелек» дәресендә лә ошо әсбәпте ҡулланыу күҙ уңында тотола.